# Күңел балкыштары

Радик ХғКИМЙғН

# Күңел балҡыштары



*Шағир Радик Хәкимйән (Радик Закирйән улы Хәкимйәнов) Башҡортостандың Ҡыйғы районы Үрге Ҡыйғы ауылында тыуып үҫкән. Совет Армияһы сафында хеҙмәт итеп ҡайтҡас, Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған.*

*Ҡайҙа ғына эшләһә лә, Радик Хәкимйән шиғриәттән, әҙәбиәттән, йыр-моңдан айырылмай. Ул шиғриәткә үҙ һуҡмағы, үҙ моңо менән килеп инде. Уның шиғырҙары күңел йылылығы, тормоштағы хәл-ваҡиғаларға үҙ ҡарашы, үҙ баһаһы булыуы менән айырылып тора. Үҙенә генә хас шиғри биҙәктәр, сағыштырыуҙар, һүрәтләү саралары аша ул уҡыусылар күңеленә үтеп инә, уларҙы уйландыра, йөрәктәрҙе ярһыта.*

*Р.Хәкимйән Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй яҙыусылар союздары ағзаһы. Уның 200-ҙән артыҡ шиғырына Башҡортостан һәм Татарстан композиторҙары тарафынан көй яҙылған.*

*Радик Хәкимйән биш шиғыр китабының авторы: ”Таңдарыма еләм”, ”Ергенәмдең йәме”, ”Күңелем тулҡындары”, ”Ғүмер ағыштары”, ”Уттарға керҙем”.*

## ***Башҡортостан — тыуған илем***

Башҡортостан — минең тыуған илем,
Уралтауҙа тыуып үҫкәнмен,
Тәүге әҙем шунда ярылып ҡалған,
Саф шишмәләр һыуын эскәнмен.
Башҡортостан — минең тыуған илем,
Ал таңдарҙы һиндә күргәнмен,
Еркәйемдең йомартлығын татып,
Тәүге бураҙнамды һөргәнмен.
Күңелемә моңдар, яҡты хистәр
Шул тупраҡтан, һыуҙан ингән ул,
Башҡортостан — тиңлек, дуҫлыҡ иле
Быуаттарҙан шулай ҡалған ул!
Башҡортостан — гүзәл гөлләмә һин,
Сәскә атһын барлыҡ гөлдәрең,
Халҡың азат, илдә муллыҡ булһын,
Нурлы булһын килер көндәрең!
Башҡортостан — икмәк, ”алтын” иле,
Даның китһен бөтөн донъяға.
Киләсәккә яҡты өмөт бағлап,
Уралтауҙа ҡояш йылмая!

## ***Бер булһа ла күр, тиҙәр***

Ҡыйғыларҙы ”ҡый” тиҙәр бит,
Алдан белеп тор, тиҙәр,
Эшкә уңған, егәрлеләр,
Ҡыйыу, ғорур, йор, тиҙәр!

Беҙҙең яҡтарға — Ҡыйғыға
Гел йылмайып кил, тиҙәр,
Көрешкәндә саф күңелдән,
Ҡуш ҡулыңды бир, тиҙәр!

Беҙҙең яҡтарға — Ҡыйғыға
Килһәң, ҡунаҡ бул, тиҙәр,
Уттай еңгәләр янында,
Ҡунаҡ, тыйнаҡ бул, тиҙәр.
Беҙҙең яҡтарҙа — Ҡыйғыла
Дуҫтарға гел ”һый” тиҙәр,
Ғашиҡ булһаң, ҡыйғас ҡашҡа,
Аҡ сәскәләр йый, тиҙәр,
Ҡасан була туй?! — тиҙәр,

Беҙҙең яҡтарҙа — Ҡыйғыла
Вәғәҙә бирһәң, тот, тиҙәр
Әйткән һүҙеңдә тормаһаң,
Әллә һин бер ”шыр” тиҙәр.
Гел ”ҡый” ҡушып һөйләшкәнгә,
Яҡташтарҙы ”ҡый” тиҙәр.
Юҡҡа-барға ауыҙ асһаң,
Телдәреңдә тый, тиҙәр!

Төйәгемде — Ҡыйғы яғын,
Мөғжизәле ер, тиҙәр.
Урман, тауҙар, шишмәләрен,
Уның аҫыл кешеләрен,
Бер булһа ла күр, тиҙәр!



08-2001.p65 94 21.08.01, 11:25
Black

### *Аҡ мамыҡтар*

Тыуған яҡҡа ҡайтып киләм.
Ҡыштар еткән әйтерһең,
Аҡ мамыҡтар осоп йөрөй,
Мин — ояһыҙ ҡош өсөн!
Осоп-бейеп ҡаршы алды,
Әллә инде танына,
Ауыл ҡапҡаһын үткәндә
Ҡосто тупыл мамығы!
Күптән инде күргәнем юҡ
Мамыҡтарҙың туҙғанын,
Байтаҡ ғүмер ситтә уҙған,
Эсеп юлдар туҙанын!
Ерем аҡ юрғанын йәйгән,
Әллә йәйҙәр түгелме?!
Аҡ мамыҡтар осоп йөрөй
Һиҫкәндереп күңелде...

### *Мин уттарға үҙем керҙем*

Мин уттарға үҙем керҙем,
Йырып сығалһам ине.
Дөрләп-дөрләп яныуҙарға
Йәнем сыҙаһа ине.
Мин уттарға үҙем керҙем,
Ҡарамай уңға-һулға.
Хыялдарым тартты микән
Был урау, ауыр юлға?!
Шиғыр яҙыу еңел түгел,
Йөрәккә ҡандар һауа.
Үҙ юлымдан атлап барам,
Яралар ала-ала.
Тау-таштарҙы яраһым бар,
Кәртәләрҙе үтәһем,
Юлдарымдың остарына
Килә барып етәһем.
Илаһи сихри донъяның
Байтаҡ серҙәрен астым.
Юлдар миңә илһам бирҙе,
Күңелдә йырҙар ташты.

### *Гармун телдәре көмөштер...*

*(Яҡташым, оҫта баянсы Сибәғәт Яруллинға)*

Һыуҙар аға, ғүмер уҙа,
Моң даръяларын кисеп,
Утыҙ йыл серле сәхнәлә
Һайралған икән нисек?!
Күпме күңелде балҡытҡан,
Йылытҡан ҡояш булып,
Гармунсының саф моңдары
Йәндәргә ҡалған тулып.
Тормош юлдарын үткәндә
Көс-дәрт биргән күптәргә.
Болотло көндә яҡтыртҡан,
Осорған ул күктәргә!
Гармун телдәре көмөштер,
Йәш ҡыҙҙар көнләшерлек,
Гармунсының моңдарына,
Юҡтыр һис тиңләшерлек!
Моң ағыла, йыр ағыла,
Йөрәктәргә ҡағыла,
Күңелдәре туңғандарҙа,
Өмөт уты ҡабына!
...Ярһыу йәнгә йыр-моңдарһыҙ
Нисек йәшәмәк кәрәк?
Әгәр йыр-моңдан айырылһа,
Ярылыр кеүек йөрәк!

### *Ап-аҡ ҡарҙа — ҡара тупраҡ*

Ап-аҡ ҡарҙа — ҡара тупраҡ,
Моңайып ҡояш бата,
Кисә бында тигеҙ ине,
Бөгөн бер яҙмыш ята.
Ап-аҡ ҡарҙа — ҡара тупраҡ,
Ҡара ер ҡалҡып тора,
Бөгөн бында изге бер йән,
Мәңгелек донъя ҡора.
Күңелдәрҙе өтә бит ул,
Юғалтыуҙар тойғоһо,
Ап-аҡ ҡарҙа — ҡара тупраҡ,
Ҡалғандарҙың — яҡындарҙың
Шулдыр ҡара ҡайғыһы!
Донъя фани, ғүмер ҡыҫҡа,
Белһәксе ҡәҙерҙәрен.
Тормоштоң тайғаҡ юлында
Өҙмәгеҙ бәғерҙәрҙе!
Һәр кем ерҙә берәү генә
Онотмайыҡсы, дуҫтарым!
Бергә саҡта гөрләп йәшәйек,
Моңон тыңлап ҡоштарҙың!
... Ап-аҡ ҡарҙа — ҡара тупраҡ,
Ҡара ер өйөлөп ята.
Ана тағы ҡояш моңһоу,
Кемдең ҡояшы бата?!

### *Ашыҡтырма, яҙмыш*

Әй һин, яҙмыш! Ашыҡтырма мине,
Яҡты көнөм бик тиҙ үтмәһен,
Йәшел ерҙән, зәңгәр күктәремдән
Килмәй әле, килмәй китәһем!
Бар бит әле һөйөп-һөйөләһем,
Ғазап утын күпме эсәһем,
Мөхәббәттең сихри ҡанатында
Йондоҙҙарға осоп китәһем.
Йәнем — сәскә! Балҡып оҙаҡ йәшә,
Һалҡын елдәр килеп теймәһен,
Бар бит әле минең кешеләргә
Нәфис гөлдәр бүләк итәһем.
...Алда ана ярһыу тормош ҡайнай,
Үтелмәгән күпме юлдарым,
Көтә мине ҡайғы-шатлыҡтарым,
Яҙылмаған яңы йырҙарым!
Күпме әле тоҙҙар ашайһым бар,
Тау-таштарҙы ярып үтәһем,
Бар бит әле минең был донъяла
Изгелектәр эшләп китәһем!



08-2001.p65 95 21.08.01, 11:25
Black